**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение**
**средняя общеобразовательная школа с.Нугуш**
**муниципального района Мелеузовский район**
**Республики Башкортостан**

**РАССМОТРЕНО**
на заседании ШМО
Протокол № 1
Кинзябулатова Г.В.
«27» августа 2020г.

**СОГЛАСОВАНО**
Зам.директора по УР
Занкина Н.В.
«28» августа 2020г.

**УТВЕРЖДАЮ**
Директор МОБУ СОШ с.Нугуш
Габбасова Г. Ш.
Приказ № 83 от 28.08.20
«28» августа 2020г.

**Рабочая программа**
**по родному языку**
**для 5-9 классов**
Уровень образования: основное общее образование
Срок реализации: 2020-2025гг.

**Составители:**
учителя башкирского языка и литературы
Габбасова Р.М.
Ямансарина М.Д.

2020

## I. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең һөҙөмтәләре

**Шәхсән һөҙөмтәләр:**

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәрҙе камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу, үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде үҫтереү һәм уны байытыу күнекмәһен булдырыу.

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең метапредмет, предмет һөҙөмтәләре:**

Туған (башҡорт) теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре булып:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

аудирование һәм уҡыу:

- телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте аңлап ҡабул итеү(тема, фекер, мәғлүмәттәр);
- уҡыу күнекмәләре (эҙләнеү, ҡарап сығыу, өйрәнеү), стиль, жанрҙар;
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт һайлап алыу күнекмәләре;
- тәғәйен материалды системаға килтереү;
- фекерҙе сағыштыра белеү;

һөйләү һәм яҙыу

- уҡыу эшмәкәрлегенең маҡсатын билдәләү, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы әйтеп йә яҙып бирә белеү;
- текст менән эш: план, һөйләү, конспект, аннотация;
- төрлө телмәр тибында һәм стилендә яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә алыу;
- монолог һәм диалог төрҙәрен үҙләштереү (этикет, диалог-һорашыу, аралашыу, диалог-фекер һ.б.);
- аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, стилистик, орфографик һәм пунктуацион нормаларҙы һаҡлап, телмәр ҡора белеү;
- доклад, реферат менән сығыш яһау, бәхәстә аргументтар ҡулланып, проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
- белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта һәм предмет-ара ҡуллана белеү;
- телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы, туған телдең кеше һәм йәмғиәт

тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

- гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм ролен аңлау;

тел ғилеменең бүлектәре; тел һәм телмәр; һөйләү һәм яҙма телмәр; монолог һәм диалог, уларҙың төрҙәре; текст төрҙәре, стилдәр, телдең берәмектәре;

- лексика һәм фразеологияның стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
- һүҙгә төрлө анализ төрҙәре: фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ;
- тел-һүрәтләү сараларын ҡулланыу;
- туған телдең функцияһын таныу, телмәрҙең эстетик ҡиммәтен баһалау.

**Башҡорт тел курсын (5-9) өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы белергә тейеш:**

- тыңланған һәм уҡылған тексты телдән һәм яҙма формала тәҡдим ителгән кимәлдә (йөкмәткеһен һөйләү, план, конспект) һөйләй алырға;
- төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа телдән һәм яҙма текст төҙөй белергә, төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа (хикәйә, хат, ғариза, баһалама, ышаныс ҡағыҙы, расписка) яҙа белергә;
- төрлө төрҙәге монолог һәм диалогты үҙләштерергә;
- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙергә башҡорт теленеэ стилистик нормаларын һәм яҙма телмәрҙә төп орфографик һәм пунктуацион нормаларҙы һаҡлау, лексика һәм фразеологияны стилистик яҡтан корректлы ҡулланыу, яҙыуҙа орфография, пунктуацияның төп ҡағиҙәләрен һаҡларға;
- тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистиканың һәм уның төп бүлектәре: тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; эш ҡағыҙҙары стилдәре, матур әҙәбиәт теле; функциональ – мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштерергә;
- һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфемик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ: йөкмәтке, төп билдә һәм структура, тел һүрәтләү сараларын ҡулланыуҙы иҫәпкә алып, тексты анализларға.

## II. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Туған тел. 5-се класс**

1. Тел - аралашыуҙың мөһим ҡоралы - 1 сәғәт
2. Синтаксис һәм пунктуация - 11 сәғәт. Һүҙбәйләнеш, һөйләмдәрҙең интонациға ҡарап бүленеше, һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре, тиң киҫәкле һөйләмдәр, өндәш һүҙҙәр, ҡушма һөйләмдәр, тура телмәр, диалог, текст, ҡыҙыл юл.
3. Фонетика. Графика. Орфография. Орфоэпия. Телмәр мәҙәниәте - 14 сәғәт. Телмәр өндәре һәм ағзалары. Фонетик анализ. Өн һәм хәреф. Ижек. Баҫым. Орфографик һүҙлек.
4. Лексика. Телмәр мәҙәниәте - 3 сәғәт. Лексика тураһында төшөнсә. Һүҙлектәрҙең бар төрҙәре менән эш итә белеү. Лексик мәғәнә. Синоним. Антоним. Омоним.
5. Һүҙьяһалыш. Телмәр мәҙәниәте - 3 сәғәт. Тамыр һәм ялғауҙар.Ялғау төрҙәре. Һүҙ нигеҙе. Һүҙьяһалыш юлдары.
6. Морфология. Телмәр мәҙәниәте - 18 сәғәт. Һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төрткөмдәре.
7. Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу . Исемдәрҙең морфологик билдәләре һәм стилистик мөмкилектәре.
8. Ҡылым, уны телмәрҙә ҡулланыу . Ҡылымдарҙың морфологик билдәләре һәм стилистик мөмкинлектәре. Һөйкәлештәр.
9 Уҡыу йылы башында ҡабатлау - 3 сәғәт, уқыу йылы аҙағында- 2 сәғәт
Дәреслектәге материалдар күләменә һәм уҡыусыларҙың ҡабул итеү ҿҙенсәлегенә ҡарап, төрлө бүлектәге дәрестәр һаны үҙгәртелде һәм башҡа бүлекте өйрәнеүгә бүленде.

**Программа материалын өйрәнеү өсөн бөтәһе 68 сәғәт бирелә, аҙнаға – 2 сәғәт, шуларҙың 55 сәғәте - яңы материалды үҙләштереүгә һәм ҡабатлауҙарға, 6 сәғәте – телмәр үҫтереүгә, 7 –е диктанттар яҙҙырыуға бүленә.**

**Туған тел. 6-сы класс**
1.Туған тел тураһында әңгәмә (1сәғ.)
2.5-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2сәғ.)
3.Лексика (5 сәғ.)
Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составы: төп башҡорт һүҙҙәре,рус,ғәрәп,фарсы телдәренән,рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр.
Башҡорт әҙәби теленең дөйөм ҡулланышлы һүҙҙәре.Интернациональ һүҙҙәр.Профессиональ һүҙҙәр.Иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр,диалект һүҙҙәр.Башҡорт теле һүҙлек составының үҙгәреп,байығып тороуы.уның юлдары.
Нығынған һүҙбәйләнештәр(фразеологик берәмектәр). Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.
4.Морфология-(45сәғ.).Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу(6сәғ.)
Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше.Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең хәбәрлек заты.Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килештәрҙең мәғәнәләре,һорауҙары,ялғауҙары.Эйәлек ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.
5.Сифат һәм уны телмәрәҙә ҡулланыу (4сәғ.)
а)Сифаттың мәғәнәһе,морфологик билдәләре,синтаксик вазифаһы.Сифаттарҙың яһалыу юлдары. Төп һәм шартлы сифаттар.Сифат дәрәжәләре,дөрөҫ яҙылышы. Сифаттарҙың исемләшеү осраҡтары.

б)Телмәрҙә синоним,күсмә мәғәнәле сифаттарҙы ҡулланырға өйрәтеү.Сифаттарға телдән һәм яҙып морфологик анализ яһарға өйрәтеү.Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.

6.Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу (3сәғ)

а) һандың мәғәнәһе,морфологик билдәләре,синтаксик вазифаһы.Ябай һәм ҡушма һандар: уларҙың дөрөҫ яҙылышы.Цифрҙар менән бирелгән һандарҙың ,уларҙа ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. Һан төркөмсәләре.Һандарҙың исемләшеп килеү осраҡтары

б)Һыҙыҡ аша яҙыла торған ҡушма һандарҙы дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен нығытыу.Һүҙ һәм цифрҙар менән бирелгән һандарҙы дөрөҫ яҙырға өйрәтеү.Һандарҙың фразеологик берәмектәрҙәге роле менән практик таныштырыу. Һандарға телдән һәм яҙып морфологик анализ яһарға өйрәтеү.Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.

7.Алмаш һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (4 сәғ.)

а)Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре.Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың һан һәм килеш менән үҙгәреүе.

б)бер һүҙҙе ҡабатлауҙан ҡотолоу өсөн,телмәрҙә алмаштарҙы ҡулланырға өйрәтеү. Алмаштарҙы телдән һәм яҙма тикшерә белеү. Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау.

8.Ҡылым һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (9 сәғ.)

а)Ҡылым буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Ҡылым төркөмсәләре.Исем ҡылым: мәғәнәһе һәм яһалышы,һөйләмдәге роле. Уртаҡ ҡылым:мәғәнәһе һәм яһалышы,синтаксик вазифалары. Сифат ҡылым: мәғәнәһе һәм яһалышы,заман формалары,һөйләмдәге вазифалары.Сифат ҡылымдың исемләшеүе. Хәл ҡылым:уның мәғәнәһе, төрҙәре.. Ҡылым йүнәлештәре,ҡылым күләмдәре,ҡылым рәүешлеге менән практик танышыу.

б) Һөйкәлеш һәм төркөмсә ҡылымдарының ябай һәм ҡушма формаларын телмәрҙә ҡулланыу.Ҡылым төркөмсәләренең морфологик билдәләрен һәм синтаксик вазифаларын билдәләй белеү;йәнле һәм яҙма телмәрҙә файҙаланыу.Фекерҙе тулы асыҡ сағылдырыу маҡсатында синоним ҡылымдарҙы ҡулланыу.Ҡылымға дөйөм морфологик анализ яһай белеү.

9.Рәүеш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу (5 сәғ)

а) Рәүеш тураһында төшөнсә:белдергән мәғәнәһе,морфологик билдәләре,синтаксик вазифалары.Рәүеш төркөмсәләре.Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары.Рәүеш дәрәжәләре,дөрөҫ яҙылышы.Рәүештәрҙең яһалышы

б)Рәүештәрҙең мәғәнәһен,морфологик билдәләрен аңлата белеү.Һөйләмдә рәүештәрҙе дөрөҫ яҙыу һәм ҡуллана белеү күнекмәһе.Рәүештәргә морфологик анализ яһай белеү.

10.Теркәүестәр (2сәғ.)

а) Теркәүестәр һәм уларҙың телмәрҙәге функцияһы.Теркәүестәрҙең бүленеше:теҙеү һәм эйәртеү

б)теркәүестәрҙең морфологик,синтаксик ролен аңлата белеү күнекмәһе

в)Теркәүестәрҙе ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә урынлаштырыу һәм телмәрҙә ундай һөйләмдәрҙе ҡулланыу күнекмәләре булдырыу.Теркәүестәре булған һөйләмдәрҙе анализлау күнекмәһен үҫтереү.

11.Бәйләүестәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (3сәғ.)

а) Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге вазифаһы.Уларҙың бүленеше

б)Бәйләүестәрҙең синтаксик ролен билдәләй белеү.Бәйләүестәрҙе исемдәр янында ҡуллана белеү.

12.Киҫәксәләр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (3 сәғ.)

а) Киҫәксәләрҙең морфологик билдәләре,телмәрҙәге вазифалары.Мәғәнәләренә ҡарап,киҫәксәләрҙең бүленеше

б)Киҫәксәләрҙең морфологик һыҙаттарын,синтаксик вазифаларын билдәләй белеү. Киҫәксәләрҙе телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү.Теркәүес менән киҫәксәләрҙе бер-береһе менән сағыштырыу.уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләү.

13.Мөнәсәбәт һүҙҙәр һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (2 сәғ.)

а) Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә.Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик роле, исме урынында килә алыуы

б) Телмрҙә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү.

14.Ымлыҡтар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (2 сәғ.).

а) Ымлыҡтар  тураһында төшөнсә:морфологик һыҙаттары,телмәрҙәге вазифалары.Ымлыҡтарҙың тҡрҙәре.Ымлыҡтарҙан һүҙҙәр яһалыу.

б)Ымлыҡтарҙы телмәрҙә ҡулланырға һәм дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү,уларҙың хис-тойғо биҙгәен билдәләү.

15.Оҡшашыу һүҙҙәре һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу (1+1 сәғ)

а) Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында төшөнсә.Уларҙың морфологик билдәләре һәм төрҙәре

б)оҡшатыу һүҙҙәре аңлатҡан һындарҙы һүрәтләй белеү һәм телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.

16.Уҡыу йылы аҙағында ҡабатлау (2 сәғ)

**Программа материалын өйрәнеү өсөн бөтәһе 68 сәғәт бирелә, аҙнаға – 2 сәғәт, шуларҙың  55 сәғәте - яңы материалды үҙләштереүгә һәм ҡабатлауҙарға, 7  сәғәте – телмәр үҫтереүгә, 6 –ы диктанттар яҙҙырыуға бүленә.**

**Туған тел. 7-се класс**

1. Тел тураһында әңгәмә – 1 сәғәт.
2. Синтаксис һәм пунктуация-52 сәғәт. Һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше
3. Ике составлы ябай һөйләмдәр - 9 сәғәт. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Ябай һәм ҡушма эйә, хәбәр. Улар араһында һыҙыҡ. Эйәрсән һөйләм киҫәктәре. Өҫтәлмәлек. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусы. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы. Хәл төрҙәре.
4. Бер составлы һөйләмдәр -  5 сәғәт. Бер составлы һөйләм төрҙәре. Бер составлы һөйләмдәрҙең стилистик мөмкинлектәре.Телмәрҙә ҡулланырға өйрәнеү.
5. Тулы һәм кәм һөйләмдәр – 1 сәғәт. Төшөнсә. Кәм һөйләмдәрҙең бер составлы һөйләмдәрҙән айырмаһы. Кәм һөйләмдәр ҡулланып, диалогтар, хикәйәләр, изложение яҙырға өйрәнеү.
6. Тиң киҫәкле һөйләмдәр -  5 сәғәт. Интонация, теркәүестәр ярҙамында бәйләнгән тиң киҫәктәр. Дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. Тыныш билдәләре. Был һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу. Телмәрҙә ҡулланыу.
7. Һөйләмдең айырымланған киҫәктәре - 10 сәғәт. Айырымланыу тураһында төшөнсә. Эйәрсән киҫәктәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтемдәре. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы.
8. Өндәш һүҙле, инеш һүҙле һөйләмдәр – 4 сәғәт. Тыныш билдәләре. Өндәш һүҙле, инеш һүҙле һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡырға өйрәнеү.
9. Тура һәм ситләтелгән һөйләмдәр – 4 сәғәт. Икенсе кешенең телмәрен еткереү ысулдары. Тыныш билдәләре. Диалог. Тура телмәр, диалог булған һөйләмдәрҙе телмәрҙә ҡулланыу, дөрөҫ уҡыу. Цитата һәм уларҙы иншала ҡулланыу-1сәғәт.
10. Уҡыу йылы башында ҡабатлауға – 3 сәғәт, уҡыу йылы аҙағында – 3 сәғәт бирелде.

**Программа материалын өйрәнеү өсөн бөтәһе 68 сәғәт бирелә, аҙнаға – 2 сәғәт, шуларҙың 59 сәғәте - яңы материалды үҙләштереүгә һәм ҡабатлауҙарға, 5 сәғәте – телмәр үҫтереүгә, 4 –е диктанттар яҙҙырыуға бүленә.**

**Туған тел. 8-се класс**

**Ҡушма һөйләм**

**Синтаксис буйынса ике составлы һөйләмдәрҙе, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе, айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау (4 сәғәт)**

**Ҡушма һөйләмдәрҙе ҡабатлау(2)**

**Теҙмә ҡушма һөйләмдәр ( 7 сәғәт)**

1. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә,уларҙа тыныш билдәләре.Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә,уларҙа тыныш билдәләре
2. Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү, ул төр ҡушма һөйләмдәргә синтаксик төпсөү яһай белеү
3. ***Предмет эсендәге бәйләнеш. Башҡорт теле*** ( 5-се класс).Синтаксис һәм пунктуация. Ике баш киҫәге лә булған ябай һөйләмдәрҙән торған теркәүесле ҡушма һөйләмдәр.Ул төр ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
4. ***Предмет-ара бәйләнеш.Рус теле*** (5-се класс).Синтаксис һәм пунктуация.Теркәүесле ҡушма һөйләмдәр,уларҙы тыныш билдәләре.

**Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр (22 сәғәт)**

1. Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү саралары:
   1)теркәүестәр, 2)бәйләүестәр, 3)килеш ялғауҙары, 4)интонация, 5)мөнәсәбәт һүҙҙәр
   Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре,улар эргәһендә тыныш билдәләре: эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр.Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, маҡсат, сәбәп, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр.
   Хәл һөйләмдәренең хәл әйтемдәренән айырмаһы (практик планда)
2. Һөйләм киҫәктәрен, айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе, хәл әйтемдәрен эйәрсән һөйләмдәрҙе, теркәүесһеҙ һәм теркәүесле ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу, уларҙы телмәрҙә стилистик маҡсатта ҡулланыу күнекмәләре.Ҡушма һөйләмдәргә телдән һәм яҙып синтаксик һәм пунктуацион төпсөү күнекмәһен үҫтереү.
3. ***Предмет эсендәге бәйләнеш.Башҡорт теле*** (7-се класс).Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр.Айырымланыу тураһында төшөнсә. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
4. ***Предмет-ара бәйләнеш.Рус теле*** (7-се класс). Айырымланған эйәрсән киҫәкле
   һөйләмдәр. Сифаттан,сифат ҡылымдан килгән аныҡлаусыларҙың айрымланыуы.Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
   Ҡушма һөйләм буйынса үтелгәндәрҙе йомғаҡлау һәм тәртипкә һалыу.

**Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр (10 сәғәт)**

1. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

2. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә.Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.
3. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһе, шул уҡ тип һөйләмдәрҙе һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһен үҫтереү.
4. ***Предмет-ара бәйләнеш. Рус теле*** (8-се класс). Бер нисә эйәрсән һөйләмле эйәртеүле һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеү ысулдары, бер баш һөйләмгә бер төрлө бер нисә эйәрсән һөйләмдең бәйләнеүе, бер баш һөйләмгә төрлө юл менән бәйләнгән бер нисә эйәрсән һөйләм.
Синтаксик һәм пунктуация буйынса ике составлы тарҡау ябай, бер нисә ябай һөйләмле ҡушма һөйләмдәр, ҡатмарлы һөйләм төҙөлмәләренән күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре тураһында ҡабатлау
**(7 сәғәт)**
**Уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып, 5-8 –се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлауҙы ойоштороу (5 сәғәт)**

**Туған тел. 9-сы класс**
**Инеш** (3 сәғәт).
Тел тураһында төшөнсә. Тел үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында.
**1-се бүлек** (3 сәғәт).
Әҙәби тел һәм диалект. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек.
**2-се бүлек** (3 сәғәт).
Башҡорт теленең стилдәре. Телмәр мәҙәниәте. Функциональ стилдәр. Уларҙың төп үҙенсәлектәре. Йәнле һөйләү стиле. Матур әҙәбиәт стиле. Фәнни стиль. Публицистик стиль. Рәсми стиль. Хаттар стиле.
**3-сө бүлек** (4 сәғәт).
Һүрәтләү саралары. Эпитет. Сағыштырыу. Метафора. Синонимдар. Синонимдар һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Грамматик синонимдар. Тасуирлауҙа антитеза ҡулланыу. Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.
**5-9-сы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә килтереү** (4 сәғәт).
Фонетика. Орфография. Орфоэпия. Лексика. Башҡорт теленең һүҙлектәре. Һүҙьяһалыш. Морфология. Орфография.
**Телмәр үҫтереү.** (8 сәғәт).
Тасуири уҡыу күнекмәләре өҫтөндә эшләү. Күренекле ғалимдар, яҙыусылар, рәссамдар, композиторҙар тураһында һөйләү һәм яҙыу. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса ундағы геройҙарға ҡарата үҙ фекереңде сағылдырып, иншалар яҙыу. Сағыштырыу юлы менән ике йәки бер нисә персонажға ҡылыҡһырлама яҙыу. Протокол төҙөү. Изложениеларҙы һәм иншаларҙы темаһына, төп фекеренә, стиленә ярашлы камиллаштырыу, уларҙа орфографик, пунктуацион, грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтеү.

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар - әҙәби тел номаларын таный белеү, уларҙы телмәрҙә күҙәтеү; - йәнле һөйләү, фәнни, рәсми, эпистоляр (хаттар), публицистик, күркәм (художестволы) телмәр стилдәрен айыра һәм таный белеү; - һүрәтләү сараларын текста таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу; - төрлө стилгә ҡараған текстар һайлай белеү; - текстарға стилистик анализ яһай белеү; - изложениеларҙы һәм иншаларҙы темаһына, төп фекеренә, стиленә ярашлы камиллаштырыу, уларҙа орфографик, пунктуацион, грамматик һәм телмәр хаталарын төҙәтә белеү.

**III. “Башҡорт теле” фәненең төп йөкмәткеһе буйынса тематик план**

| Уҡыу курсының бүлектәре | Кластар | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5 класс | 6 класс | 7 класс | 8 класс | 9 класс |
| Телмәр һәм аралашыу телмәре. | 1 | 2 | 2 | 1 | 4 |
| Телдең функциональ төрлөлөгө. | 2 | - | 1 | - | 3 |
| Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 2 | 2 | 1 | 2 | 3 |
| Фонетика һәм орфоэпия. | 20 | - | - | - | 2 |
| Графика. | 2 | 4 | - | - | 1 |
| Морфемика һәм һүҙьяһалыш. | 2 | - | - | - | 1 |
| Лексикология һәм фразеология. | 4 | 5 | - | - | 6 |
| Морфология | 44 | 59 | - | - | 1 |

Прошито, пронумеровано и
скреплено печатью
9 листов
Директор
МОБУ СОШ с. Нугуш

Габбасова Г.Ш.